# ҺӘНӘК

12+

10
ОКТЯБРЬ 2023




podpiska.pochta.ru

БЫЛ ҺАНДА

●Фәрит Рәмов отолғанмы? (3-сө бит) ●Ҡыҙ һәм быҙау табылған! (6-сы бит) Ҡыҙҙар сер сисә (7-се бит) ●Заһиҙә Мусина сәсен киҫтергән (8-се бит) ●Фәрүәз Сәйфуллин тәнҡитләй (9-сы бит) ●Әлеп алабыҙ, һелкеп һалабыҙ! (10-11 биттәр) ●Соко, студент! (12-се бит) ●Тапҡырҙар турниры (14-се бит)

# «Һәнәк» күҙлегенән

## Донъяла

Таулы Ҡарабахты әрмәндәр менән әзербайжандар бик оҙаҡ йылдар һуҙымында бүлешә алмай. Майҙаны буйынса беҙҙәге Ғафури йәки Мәләүез районы кеүек кенә территорияны яңыраҡ Азербайжан бер тәүлек эсендә йәнә үҙенеке итте, бындағы 120 мең халыҡтың йөҙ меңдән ашыуы Әрмәнстанға күсенде. Әрмәнстандың премьер-министры Никол Пашиняндың Таулы Ҡарабахты Әзербайжандыҡы тип таныуы һәм ундағы халыҡҡа ярҙам итеүҙән баш тартыуы ошондай әҙемтәләргә килтерҙе лә инде. Ә хәҙер Пашинян бөтә ғәйепте Рәсәйгә яба. Уның фекере буйынса, Таулы Ҡарабахты яклап әзербайжандарға ҡаршы Рәсәй һалдаттары һуғышырға тейеш, ә әрмәндәр ситтән генә тамаша ҡылып торһа ла ярай.

Әрмәндәрҙе аҡыллы халыҡ тиҙәр – дөрөҫ икән. Йыланды тотһаң да кеше ҡулы менән тот, тип тап Пашинян кеүек әҙәм әйткәндер, буғай.

## Рәсәйҙә

Һуңғы осорҙа бөтә илде шаҡ ҡатырған хәл булды. Заправкаларҙа бензин һәм солярка хаҡы 20-30 тингә кәмене. Рәсәй тарихында булмаған ваҡиға был. Беҙ инде яғыулыҡҡа хаҡтың артыуына ғына өйрәнгәнбеҙ, ә кәмеүен һис башҡа һыйҙырып булмай. Май айында ғына литры 58 һум торған солярканың хаҡы етмеш һумға етеүенә аптырамайбыҙ, әлбиттә.

Ғөмүмән, ҡайһы бер эксперттар тауарҙарға хаҡтарҙың йыл башынан 50 процент самаһына артыуын билдәләй. Статистика органдары фекеренсә, был күрһәткес 18 процент тирәһе генә. Моғайын, улары магазиндарға һирәк йөрөйҙәр йәки мәктәптә математиканан насар уҡығандарҙыр. Юғиһә, Рәсәйҙә уртаса айлыҡ эш хаҡы 70 мең һумдан артығыраҡ, тип белдермәҫтәр ине. Мәйтәм, яңылыш өс айҙыҡын бергә ҡушманылармы икән?

## Башҡортостанда

Республикала ғинуар-июнь айҙарында 17450 бала тыуған, 24130 кеше вафат булған. Халыҡ һаны кәмеүен дауам итә. Бәлки, ситтән килеүселәр иҫәбенә хәлде яйға һалырға мөмкиндер? Юҡ шул, ошо осорҙа 60 меңдән ашыу ситкә китһә, республикаға 59 меңләп кеше күсеп килгән.

Беҙҙә барыһы ла һәйбәт, тормош алға бара, йәшәргә кешеһе генә юҡ, ти Борайҙағы бер уҡыусыбыҙ. Баҡһаң, районда йыл башынан ни бары 98 бала тыуған, 260 кеше үлгән. Был бик хөрт. Халҡы кәмегән ерҙәргә ерһеҙ халыҡтар килеп тулыусан бит.

**Марат ӘМИНЕВ.**



А. ВӘСИЛОВ



podpiska.pochta.ru

# 1 октябрь – ололар көнө!



## БЕҘ ҠАРТ ТҮГЕЛ, БЕҘ – ОЛО!

Йәш сакта йәш булыу нимә –
Йәшлек үҙе йәш бит ул!
Йәшлектәге саф һөйөүҙәр
Күҙ өҫтөндә ҡаш бит ул!

Алда ғүмер оҙо-он, ку-үптер,
Һай, ҡанатлы, сая саҡ!
Кемдән йәшлек үтһә, үтер,
Беҙҙә үтмәй ҡаласаҡ.

...Тормош үҙенекен туҡый,
Беҙ ҙә шунда юл һалдыҡ.
Ә йәшлекте, сарыф итмәй,
Күңелдә һаҡлап ҡалдыҡ,
Үҙебеҙ менән алдыҡ.

Беҙ ҙә гел әбей булмаған,
Тал-сыбыҡтай ҡыҙ инек.
Егеттәр ут-ялҡын булһа,
Беҙ – күк ялҡын – ҡуҙ инек.

Беҙ әле йәшәп туймаған,
Ҡартайҙығыҙ, тимәгеҙ.
Ник туҡһан, ник йөҙ булмаған –
Йәшебеҙгә теймәгеҙ!

Ҡарттар, тип әйтә күрмәгеҙ,
Беҙ – оло! Беҙ ҡарт түгел.
Йәшлектәге йәш саҡтан да
Йәшерәк беҙҙең күңел!
Үәт!

**Таңһылыу ВӘЛИЕВА,**
**Баймаҡ районы, Байым ауылы.**

•••

Ололар көнөнә арнап, ниңә
Яҙманың? – тип көтә дуҫтарым.
Яҙманым шул, һис тә генә бөгөн
Маҡтап яҙыр һүҙҙәр тапманым.
Ҡартлығымдың маҡтар бер ере юҡ, –
Иртән торһаң йөрәк ашҡына.
Билең тотоп, тора (а)лмай йонсойһоң,
Ауыртмаған һымаҡ баш ҡына.
Кухня яғына сыҡһаң, өҫтәлендә,
Көтөп ята бер устай дарыу.
Барын яттан, үҙеңсә, эсәһең, –
Ҡайҙа инде врачка барыу!
Дарыуҙан һуң, һөтләп сәйең эсһәң,
Киткән кеүек күҙең асылып.
Ыңғайлы бер, ярһып типкән йөрәк
Ҡалған кеүек бер аҙ баҫылып.
Шунда ғына күҙеңә салына,
Фекер йөрөй башлай башыңда.
Әйләнәңдә тормош ғәзизләнә,
Матурая булған бар донъя!
– Эй, дуҫтарым, һуң булһа ла,
Ҡабул итегеҙ минән:
– Барығыҙҙы ла ҡотлайым
Ололар көнө менән!!!

**Мансур РӘХИМҒОЛОВ,**
**Баймаҡ ҡалаһы.**

# КЕМ КЕМДЕ ОТҠАН?

Миңә ике тиҫтә лә тулмаған әле, танау ул-был еҫте яңы һиҙә башлаған мәл. Клуб мөдире булып эшләп йөрөйөм. Бер көн ауыл советы рәйесе – Ниғәмәт олатай саҡыртып алды ла:

– Ана, директор иптәш Хәмитов эҙбизгә барырға йыйына. Минең атты ек тә, алып ҡайтып, көн-төн ыҫлаған стеналарыңды ипкә килтер, – тигән әмер бирҙе.

Хәйбулла ағай менән өс тиҫтә саҡрымда ятҡан Әбделкәримгә юлландыҡ. Тик эҙбиз ебәреүсе ағай беҙҙең һуңға ҡалғанлыҡты белдерҙе, бактиһәң, материал кисә генә бөткән булып сыҡты. Рәис олатай әйтмешләй, иптәш Хәмитов үҙенең директорлығын күрһәтте буғай. Ныҡыша торғас эҙбиз ебәреүсе йомшарҙы һәм:

– Ярар, берәр центнер күп нәмә түгел, тапһағыҙ, һайлап ҡарағыҙ! – тип мейес ишектәрен асып ебәрҙе.

Аттарҙы яҡынайтып, эскә үтәбеҙ. Бер нисә урында өйөм-өйөм тумалаҡ киҫәктәр ятҡылай. Хужаның үлсәргә лә уйы юҡлығын һиҙгәс, мин, артығыраҡ алыу маҡсатынан, киҫәктәрҙең еңелерәктәрен Хәмитов иптәш яғына тәгәрәтә һалам да, ауырҙарын йүгереп йөрөп арбама ташыйым. Ағайымдың, киреһенсә, еңелдәрен һайлауын күреп, хәленә ҡарайҙыр инде, тигән булам үҙемсә. Йөк арыу булды, уны хужа күҙенән арыраҡ шылдырам, ә ағайым һаман типкеләп, еңелдәрен эҙләүен дауам итә. Үҙе бер нәмә лә өндәшмәй, мин тәҡдим иткәндәрҙе лә алмай.

Хужаға, кире бороп ҡайтармауына рәхмәттәр әйтә-әйтә ҡайтыу яғына ыңғайлайбыҙ. Директор иптәштең аты тиҙ барғандай, ә минеке ҡара тиргә бата башланы. Мәҡсүт тауында бөтөнләй хәле самаланды булһа кәрәк, туҡтаһа, мин арбаны терәтеп торған булам. Ағайым күптән түгелге генә уҡыусыһы менән ваҡланып тормайса, мине көтмәй ҡайтып китте. Артыҡ эҙбиз сәлдереүемә ҡыуана-ҡыуана, туҡтай-туҡтай булһа ла, төн урталары ауыуға, дөрөҫөрәге, таңға мин дә ҡайтып еттем.

Ә иртәгәһенә минең "табышка" күптәрҙең иҫе киткән. Бактиһәң мин янып бөтмәгән таштарҙы тейәгән дә ҡайтҡанмын икән. Иншаллаһ, мейестең ауыҙы ҙур булғас, бағыусы апай уларҙы мейестә тотоп яндырып, әрәм итмәне. Ҡайһылай итәһең, отоу бер яҡлы булмай икән шул.

**Фәрит РӘМОВ.**



# ЮҒАЛМАҪ МИРАҪ



Уҙған айҙа Өфөләге Матбуғат йортонда БР Яҙыусылар союзының Юмор һәм сатира секцияһы ултырышы үтте. “Һәнәк” һәм “Толпар” журналдарының әүҙем авторы, донъялыктан ваҡытһыҙ киткән Әлиф Ғәлимовтың ҡулъяҙмаһы ҡаралды унда.

Сатирик яҙыусылар – Секция етәксеһе, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Марсель Сәлимов, Марат Әминев, Венер Исхаҡов, Мөнир Вафин һәм “Һәнәк” вәкиле Илгиз Ишбулатов шиғырҙарҙың һәм хикәйәләрҙең көслө һәм “бушаҡ” яҡтарын билдәләне. Илдус Фазлетдинов, Рәзилә Ырысҡужина һәм Руслан Сөләймәнов секцияға онлайн ҡушылды. Һөҙөмтәлә, барыһы ла ҡулъяҙманы “Китап” нәшриәтенә тәҡдим итергә була, тик төүҙә йәмәғәт мөхәррирҙәренән ҡаратыу кәрәк, тигән бер фекергә килде. Мөнир Вафин менән Илгиз Ишбулатов ҡулъяҙманың йәмәғәт мөхәррирҙәре итеп һайланды.

Авторыбыҙҙың хәләл ефете – Сәлиә Йәнгир ҡыҙы ла булды сарала. Ул Әлиф Ғәлимовтың шиғырҙарын һәм хикәйәләрен йыйып, туплап, “Гомерем мизгелләре” исемле китап итеп бастырған. Ағайҙың мираҫы юғалмаҫ, былай булғас!

**Т. Яғалсин.**

# ЙӘШӘЙБЕҘ ӘЛЕ!




– Ҡотла, бисәкәй, ҡотла! – тип ҡыҫҡырҙы Мансур, фатирының ишеге асылыр-асылмаҫ элек.

– Быйыл да депутат булырға яҙҙымы? – тине Сәлимә.

– Майлаған кеүек шыма үтеп кителде, алтыным!

– Ул программа менән үткән һайлауҙа ла ҡатнашҡайның бит.

– Программа бына тигән! Һүҙ тейҙерерлек түгел. Хи-хи-хи, өсөнсө һайлауҙа ҡатнашам бер үк программа менән! Ызначит, халыҡҡа окшай программам. Ана бит, паддержайт итәләр. Рәхмәт уларға.

– Ҡара әле, алтыным, бөтә депутаттарҙың программалары тормошҡа ашһа, давно коммунизмда йәшәр инек, түгелме?

– Әлбиттә, йәшәр инек. Ләкин көндәлек эш, шаҡошоҡо, ваҡ-төйәк закондар сығарыу менән көнөбөҙ үтә. Программаларыбыҙҙы тормошҡа ашырырға ваҡытыбыҙ ҙа, хәлебеҙ ҙә ҡалмай. Унда барып эләкһәң, иркәм, биш йыл бер көндәй ҙә түгел. Һә тигәнсе үтә лә китә. Бошонма, бисәкәй, был программа мәктәпкә беренсе класҡа яңы барған улыбыҙға ла ярап ҡалыр! Ул да ошо программаны юғары күтәреп, атаһы юлынан депутатлыҡҡа үтеп китер. Шулай булғас, тормош дауам итә! Йәшәйбеҙ әле, йәшәйбеҙ, бисәкәй!

**Сәлих ВАҺАПОВ.**

# "ФИЗИК"



Беҙҙең ойошмала эшләүсе слесарь дуҫым "Нива" автомобиленә бензин багы урынлаштырырға булған. Уны урынына һалып, өҫтөнә үҙе яйлы ғына ултырып, ҙур диаметрлы төп торбаны кейҙереп, ҡамыт менән һыҡтырып ҡуя. Ә бына икенсеһен, ярты дюйм самаһындағыһын, кейҙереү мәшәҡәтле булыуын белгәнгә күрә, шырпы һыҙып, башын йылытырға була. Бак ҡоро булһа ла, эсендәге бензин парҙары үҙ эшен башҡара.

Шартлау тауышына бөтөн участка йыйылды. Шар формаһын алған бензин багы дуҫымды ҡапыл күтәреп, башын машина түбәһенә сәпәгән. Йөҙө ҡәфен төҫөнә кергән, башын ҡулы менән тотҡан дуҫты машинанан үҙемә күтәреп төшөрөргә тура килде. Уның мастерға яҙған аңлатмаһындағы: "Физика закондарын ҡулланып..." – тигән һүҙҙәрен уҡыған иптәштәр уға "Физик" тигән ҡушамат тағып та ҡуйҙы.

**Әлиф ҒӘЛИМОВ.**




podpiska.pochta.ru

# Көнбағышлы ғүмер

– Миңә һәр ваҡыттағыса, — тине тулы кәүҙәле ҡатын. Һатыусы шунда уҡ бер кило көнбағыш бирҙе. Ҡатын әҙерләп ҡуйған аҡсаһын тоттороп, һаубуллашып, сығып китте. Быны күҙәтеп торған Әмилә һатыусыға аптыраулы ҡараш ташланы:

– Кем булды ул?

– Танымайһыңмы әллә? Кәримә лә йе. Ә-ә, ул килен булып төшкәндә, һин ҡалаға күскән инең бит әле. Ғәленең ҡатыны.

– Ыста, ул ошондай ҡатынды алдымы? Һыу һөләгөләй ир... Ул бит теләһә кемде үҙенә ҡарата ала ине! Ниңә бындайын алды икән?

– Алды шул! Тыштан тыныс ҡына булһа ла, Кәримәнең эсендә ут яналыр ул! Ғәленең ҡанын һура ғына. Бахыр ирҙең бер ял иткәнен күргәнем юҡ. Йә көтөү көтә, йә баҡсала эшләй, йә урмандан ҡайтып инә белмәй... Эш аты урынына егә! Хатта һыйырын һауҙырта!

– Китсе, ир эшеме ул һыйыр һауыу?! Шул тиклем дә ялҡау ҡатын була икән!

– Була! Үҙе симешкә сиртеп тик ята өйҙә! Аҙна һайын килә лә көнбағыш ала... Нисек тештәре ҡойолоп бөтмәгән икән?

– Ысты-ыста, китсе-китсе...

– Ғәле бит шул тиклем эшлекле! Донъяһы ялтлап тора! Ҡатындан ғына уңманы... Кәримәһе берҙе екереп ҡысҡырып ебәрһә, тәҙрәләре ҡалтыранып китә... Көн юҡ Ғәлегә!

Шулай Әмилә магазиндан ауыл яңылыҡтарын белешеп сыҡты. Ун йыл тирәһе булманы бит бында. Хәҙер ҡаланан кире ҡайтҡас, һуңғы ваҡытта нимәләр барғанын белергә кәрәк. Артабан бында йәшәйем тиһә, кешеләрҙе лә, уларҙың тормошон да алдан белеү хәйерле. Тик бына Ғәлене башынан алып ташлай алманы ла ҡуйҙы. "Эх, миңә шундай ир булһа ине лә ул! — тип уйланы ул. — Емереп донъя көтөр инем. Уңманым бит ирҙәрҙән, уңманым! Ниңә башҡаларға шундайҙар эләгә лә, миңә осрамай ул?! Тукта! Мин ул бисәнән нимәм менән кәм! Ир кәрәккәс, барырға ла алырға кәрәк!" Шулай Әмиләнең алтын аҡылы план тыуҙырҙы: Ғәлене үҙенә ҡаратасаҡ!

Әмилә оҙаҡ уйламай планын тормошҡа ашыра башланы. Хәҙер Ғәленең артынан ҡалмай. Ул урманға барһа, Әмилә килеп сыға, көтөүгә китһә, яланда көтөп тора, урамда үтеп барһа ҡаршыһына пәйҙә була... Матур һүҙҙәр әйтеп, мөлдөрәп ҡарап ҡына торҙо Ғәлегә. Ул да юҡ тимәй, Әмиләгә хәбәрен һөйләй, хәлен белешә, көлдөрә... Бесәй һымаҡ Ғәле эргәһендә урала торғас, ир ҙә уға эҫенеп китте. Ә бер көндө ҡатынын бөтөнләй ҡалдырып, һөйәркәһенә күсенде.

Әмиләнең тантана итеүе! Ниндәй ирҙе тотоп алды! Тик элекке ҡатынан ғына әҙерәк шөрләне. Өйөнә килеп инеп, ғауға ҡуптарһа, нимә эшләр инде?.. Бер аҙна үтте, икенсеһе тамамланды, өсөнсөһө китте... Кәримә бөтөнләй күренмәне. Башта Әмилә: "Тимәк, яратмаған", — тип уйлап, ирле ғүмергә ҡыуанып йөрөнө. Әммә бәхете оҙаҡ һуҙылманы. Бер көн илай-илай Кәримәгә үҙе килеп инде:

– Ғәфү ит инде, зинһар, алдан белһәм... Белгән генә булһам... — тине ул күҙ йәштәре менән. — Ал кире Ғәлеңде! Кәрәкмәй!

– Ниңә улай? — тине Кәримә, йылмайып.

– Бу-бу-бу-бу... Ауыҙы ябылмай! Хәбәр һөйләп тик йөрөй! Иртән таңдан башлай ҙа ҡара төнгә тиклем гәп һата! Бер минутка ғына тынһасы, исмаһам! Мин уның менән сиңерткә нисек йырлағанын онота башланым! Етте! Кәрәкмәй! Тынлыҡта йәшәгем килә!

– Миңә лә тынлыҡ окшай, — тип Кәримә инде мыҫҡыллы көлдө.

– Нимә эшләргә? Нисек кенә ауыҙын яптырырға? Миңә ауыҙ асырға ла хут бирмәй. Әйтһәм дә ишетмәй! Нисек һин түҙҙең?

– Ҡысҡырып ҡараныңмы?

– Ишетмәй! Уның ҡолағын барып етерлек тауыш юҡ миндә!

– Малың бармы?

– Юҡ.

– Баҡсаң?

– Юҡ, ҡайҙан?!

– Улайһа, мә, — тине ҡатын, бер шыптыр көнбағыш сығарып.

– Миңә нимәгә ул?! Нисек ауыҙын яптырайым, тием бит! Һин миңә симешкә бирәһең! Ярҙам итерһең тип килгән булам...

– Һиңә түгел! Ғәлегә был. Ошоно ҡурып, тотторһаң, ауыҙы аҙға ғына булһа ла ябыла. Ҡыш көнө бигерәк тә кәрәк була..

Әмилә ҡайтып симешкә ҡурғанында магазиндағы тәүге осрашыуҙы иҫенә төшөрҙө. Бына нимәгә Кәримә симешкә алған! Бына нимәгә Ғәле тышта эшләп тик йөрөгән... Кеше һүҙенә ышанып, матурлыҡҡа алданды! Аҡылы һуң килде шул...

**А. СӘЛӘХОВА.**

## "ОРКЕСТР КАЙҘА?"

Телевизорҙан "Прощание славянки" маршын тыңлап ултырҙым да, әрмеләге бер хәл иҫкә төштө.

Ярты йыл сержант уҡыуҙарында булып, унан һуң йыл ярым Германияла хеҙмәт иттем. Ниһәйәт, ҡайтыр көнөбөҙ ҙә етте. Беҙҙән алда ике-өс төркөмдө, шартына килтереп, оркестр менән оҙаттылар, ә беҙ сумаҙандарҙы тотоп штаб эргәһенә йыйылһаҡ, мәһиңә, оркестр ҙа, оҙатып ҡалыусы офицерҙар ҙа юҡ. Күңелһеҙ генә автобус көтөп ултыра инек, ҡапыл полк командирыбыҙ килеп сыҡты.

– Һаумыһығыҙ, һалдаттар! Нимә, ҡайтып бараһығыҙмы?

– Тап шулай, иптәш подполковник! – беҙҙең яуап.

– Ә оркестр ҡайҙа?

– Юҡ, иптәш подполковник!

– Миңә часть буйынса дежур офицерҙы саҡырығыҙ әле! Тиҙ генә килеп етһен!

Һә, тигәнсе, уныһы ла пәйҙә булды. Командирҙың яңы әмере яңғыраны:

– Ун минуттан оркестр ошонда торорға тейеш!

Беҙҙең ауыҙҙар йырылды. Оркестр менән оҙатылыуҙың нимә икәнлеген аңлатып тороуҙың кәрәге юҡтыр. Ошо ун минут эсендә, беҙ, дембелдәр, бик ҡыҙыҡ тамаша күҙәттек. КПП яғынан, тревога мәлендәге һымаҡ, музыка ҡоралдарын ҡосаҡлап, музыканттар йүгереп килә ине. Командирыбыҙ үтә талапсан булды шул. Оркестр беҙҙе иң данлыҡлы "Прощание славянки" менән оҙатып ҡалды. Ә беҙ яратҡан командирыбыҙға ғүмер буйына рәхмәттәр уҡыйбыҙ.

**Әхәт ИШБУЛАТОВ,**
**Баймаҡ районы.**

podpiska.pochta.ru

## БЕЛМӘЙЕМ УЛ КИНГ-КОНГТЫ!

Ҡалала йәшәүсе ҡустым яңы урындан өй һатып алған да, шатлығын уртаҡлашыу йәһәтенән, туғандарын өй туйларға саҡырмаҡ булып, ауылға шылтырата. Телефонды өләсәһе ала:

– Эйе, тыңлайым!.. Ә?.. Нәмә тиһең?.. Ишетеп етмәйемсе!.. Ҡайҙа тиһең?.. Әй, юҡ! Белмәйем ул Кинг-Конгты!

– ...

Аҙаҡтан аңлашылыуынса, ҡустым өләсәһенә өйөнөң ҡалалағы кемпинг янында булыуын аңлатып маташҡан икән.



## "КЕЙӘҮҘЕҢ АРТЫНА ТЫҠ"

Был хәл бесән өмәһендә булды. Кисен кәрәк-яраҡты йыйнап, ҡайтырға йөрөйбөҙ. Ир-ат эш ҡоралдарын, ҡатын-ҡыҙ һауыт-һаба теүәләй. Еңгәләрҙең береһе "бынау ҡаҙанды ҡайҙа итергә икән?" тип һораған, атайым "уны, ана, кейәүҙең артына тыҡ" тине. Беҙ быны үҙебеҙсә аңлап, урман яңғыратып көлөп ебәрҙек, атай беҙгә ғәжәпләнеп ҡарап ҡуйҙы. Ул ҡаҙанды кейәүенең машинаһының арткы багажнигына һалырға ҡушҡан ине.

## ЯУАБЫН ТАПТЫ

Уҙған быуаттың 80 – 90-сы йылдарында, колхоз-совхоздарҙың гөрләп эшләп торған сағында, булған был хәл. Ул саҡтарҙа социаль объекттарҙы төҙөүгә башлыса әрмәндәрҙең шабаш төркөмдәре йәлеп итилә торғайны. Шулай Кергөрөй (Григорий) исемле кешенең бригадаһы беҙҙең ауылда ферма өсөн биналар һәм мәктәп төҙөп ятты. Көндәрҙең береһендә быларҙың эшмәкәрлеген тикшерергә колхоз председателе килә. Унан алдараҡ төҙөүселәр таштарҙан бик бейек һәм оҙон итеп стена теҙеп ҡуйған булған. Иртәнсәк килеүгә теге стена ишелеп төшөп ята, ти. Председатель, "нимә булды?" тип һораған, тегеләрҙең прорабы, исе лә китмәгән төҫ менән, "малайҙар типкәндәр, моғайын" тип яуаплаған.



## КЕМГӘ НИМӘ

Телефон аша ике апайым һөйләшә:

– Һөйөнсө! Һеңлеңдең бөгөн ҡыҙы тыуҙы!

– Шулаймы ни?.. Бына минең дә бөгөн һыйырым быҙауланы...

## ӘРМЕ ҺИНӘН КЕШЕ ЯҺАЯСАҠ!

Әрмегә алыныусылар зыу килешеп военкоматта медицина тикшереүе үтә. Күҙ табибы бүлмәһенә бер егет килеп инде.

– Был ниндәй хәреф?

– А.

– Юҡ, «Б». Ә быныһы?

– В.

– Түгел, «И»!.. Ҡуй, етер! Яҡындан һуғышыуға яраҡлыһың. "Годен!"

Ошо уҡ егет ҡолаҡ тикшереүсегә барып керҙе.

– Ҡолағыңда сайыр бар. Ниңә таҙаламайһың?

– Ул сайыр түгел, шампан бөкөһө. Әрмегә оҙатыу кисендә дуҫтарым иҫтәлек өсөн ҡултамғаларын яҙып тығып ҡуйҙы.

– Баҫ анау мөйөшкә. Ишетеү һәләтеңде тикшерәм. Мин шыбырлап әйткән һандарҙы ҡабатла: 92.

– 102.

– Тукта, ниңә улай? Мин тукһан ике тинем бит!

– Долларҙың курсы бөгөнгә 92, евроныҡы – 102.

– Разведкаға эшкинәһең. "Годен!". Тай бынан!

Киләһе сәйәхәт – невропатолог бүлмәһе. Табип ҡулына бәләкәй генә сүкеш алып егеттең бармаҡтарына, ҡул суҡтарына һуҡҡылап ҡараны:

– Беленәме?

– Эйе.

– Ә хәҙер?.. Ой!!! – Тубыҡ ҡапҡасына һуғыуҙан егеттең аяғы кинәт күтәрелеп китеп табиптың үҙен осора типте.

– Реакцияң ут кеүек. "Годен!" Башҡаса инеп йөрөмә бында!

Артабан психиатр ҡабул итте.

– Башың ауыртмаймы?

– Ауырта. Кисәгенән һуң.

– Чепуха. Әрмелә каска кейерһең.

– Яман төштәр күрмәйһеңме?

– Күрәм.

– Маладис! Әрмелә йоҡламаҫҡа шәп булыр.

– Йоҡлаған ваҡытта тороп йөрөмәйһеңме?

– Йөрөйөм. Урамға сығып китәм.

– Бик шәп. Төнгө ҡарауылға годенһың. Бар, тай бынан!..

Ниһайәт, нисек кәрәк шулай тикшереү үтеп бөткәс, егет дәғүәһен белдерер өсөн военкомға барып инде.

– Минең күҙҙәрем насар күрә, ҡолаҡтарым ишетеп етмәй, нервыларым ҡаҡшаған, психикам боҙолған. Ә миңә «годен» тинеләр!

– Шунан нимә булған?

– Ә һеҙ ҡарағыҙ, мин бит бөтөнләй кеше түгелмен!

– Күрәм, ләкин әрме һинән барыбер кеше яһаясаҡ! Ә хәҙергә хуш!..

**Ишдәүләт САФИУЛЛИН.**






podpiska.pochta.ru

# ЯЛТЫР ҠАП ҺӘМ АГЕНТ ИР

Май сүлмәге тышынан билдәле, тиҙәр. Тик реклама маркетингы үсешкән һайын, был әйтемдең иҫкерә барыуын тойорға мөмкин.

Әхирәттәрем бар-бер артлы бәпәй таба башлағас, минең дә уҙҙәре менән бер ваҡытта декретта ултырыуымды теләнеләр. "Балалар бергә үҫһен. Аҙаҡ беҙҙең кеүек дуҫ булырҙар", – тип тә ебәрҙеләр. Тик бәндә теләй, Алла бойора шул. Оҙаҡҡа һуҙылып китте. Бер мәл ҡыҙыу итеп уҙҙәренсә "дауалай" башланылар. "Ошо сәйҙе көнөнә бер пакетлап ҡына эс. Фәлән йырсының ҡыҙы, шуны эскәс, балаға уҙған икән", – тип Өфөгә йомошо менән килгән сағында, ҡалдырып китте берәүһе. "Ярай", – тинем дә, аш-һыу бүлмәһендә бер нисә айға бер генә асыла торған кәштәгә ҡуйып, оноттом. Иҫкә төшкәндә, ҡулланыу ваҡыты уҙған ине инде.

Короновирус ҡоторған саҡ, был зәхмәт беҙҙең ғаиләгә лә килеп ишек шаҡыны. Кеше араһына сығыу тыйылды. Шул арҡала, ирем дә вахтаһынан тороп ҡалды. Бер көндө домофондан:

– Ишегеңде ас! – тигән кәтғи тауыш яңғыраны. Ишекте асыуыма берәүҙең ҡулы ғына һуҙылып кереп, теге сәйҙең ишен тотторҙо.

– Акса бирәм! Көтөп тор! – тип ҡысҡырыуыма:

– Беҙҙән бәпес бүләге булыр! – тине әхирәтем.

– Һуң, әле ул бөтөнләй юҡ бит! – тием аптырап.

– Ошо сәйҙе эс тә, эшләгеҙ! Икәү бергә сакта йоклап ятмағыҙ! – Йәнә нимәләр тип фарман биргәне ишетелмәй ҡалды.

– Әхирәттәреңде тыңларға кәрәк, – тип ирем мут йылмайып ҡаршы алды.

– Ирҙең әйткәне – закон! – Шунда уҡ һыу ҡайнатырға ҡуйҙым. Үҙем шул арала составына күҙ һалам. Меңъяпраҡ, үгәй инә үләне... – Бәй, бында бит үҙебеҙҙең аяҡ аҫтында тапалып ятҡан үҫемлектәр ҡушылмаһы, – тип иремдә саҡырам.

– Ә үҙе Европала сығарыла, – ти, был мөғжизә тыуҙырыусы сәй тураһында интернеттан уҡый-уҡый янына килеп.

– Үләне лә юҡ бында. Саңы ғына... – тим, үтә күренмәле сәй пакетын өҫкәрәк күтәреп әйләндереп-тулғандырып ҡарап. – Нимә өсөн минең эш хаҡының өстән бер өлөшөн түләргә һуң?

– Реклама, ялтыр ҡабы өсөн, – тип көлөмһөрәй хәләл ефетем. – Бәпесте үҙемә генә "һатып алырға" тура килер инде...

•••

Әйткәндәй... Бер нимә лә мәңгелек түгел. Быны интернет селтәрҙәрендәге ҡайһы бер сайттарҙың юкка сығыуынан да күрергә мөмкин. Бер мәл күптәрҙең ҡабаттан "Бәйләнештә" сайтына "ҡайтҡанын" иҫләйһегеҙҙер. Сайт был осорҙа яңы исемдәр асты, ҡыҙыҡлы фекерҙәр менән байытылды. Бер мәл филологҡа уҡыған бер ханым күршеләрҙә ижад ителеп, тотош Рәсәй уҡыусыһын, кино сәнғәтен шаулатҡан әҫәрҙе уҡыуы тураһында яҙған ине. Тәнкит-фәлән дә, фекер ҙә юҡ. Блоггер буларак, ваҡытын нисек уҙғарғанын күрһәткән. Шатланып киттем. Китап уҡыусы блоггер бар, тип.

– Бер быуатлыҡ башҡорт тарихын үҙ эсенә һыйҙырған Таңсулпан Ғарипованың "Бәйрәкәй"енә, Гөлсирә Ғиззәтуллинаның һәҙиә Дәүләтшинаның тормош юлын сағылдырған "һәҙиә"һенә лә шундай иғтибар бүленһә, шәп булыр ине, – тинем, хыялдарға бирелеп.

– Уларҙы уҡымаһымсы, – ти был күҙ ҙә йоммай.

– Бәй, үҙебеҙҙең бестселлерға әйләнергә тейешле әҫәрҙәрҙе уҡымайынса, теге әҫәр менән нисек ҡыҙыҡһынып киттең һуң? – тим, аптырауымды йәшермәйенсә.

– Реклама нык эшләнде бит... Бер мәл һәр үтектән әҫәр менән автор исеме ишетелә башлағас, электрон вариантын һатып алдым.

Был ике ваҡиғаны сағыштырып, байтаҡ ҡына уйлап йөрөй торғас, бер фекергә килдем. Тыуған еребеҙҙә аяҡ аҫтында тапалып ятҡан шифалы үләндәр, халҡы кәҙерен белһен өсөн, ялтыр ҡапҡа һалынып, ат хаҡына һатылырға тейеш. Ә беҙҙең әҙибәләрҙең ижадына ихтыяж артһын өсөн, уларға реклама агентына кейәүгә сығырға кәрәктер...

**Рәзинә ЗӘЙНЕТДИНОВА.**

# ӨСӨНСӨ – АРТЫҠ

Утыҙҙың арьяғына сығып барған Айҙарҙың кәләш алып ҡайтып төшөүен ғәҙәти итеп кенә ҡабул иткәндәй булды әсәһе. Мәле еткән – өйләнә, бында нимәһенә аптырарға? Алһыуҙы ла оҡшатты кеүек, һәр хәлдә ауыҙ асып артыҡ һүҙ әйтмәне.

Йәшәй башлауҙарына ике аҙна тигәндә, йәш кәләш иренә беренсе хәсрәтен еткерҙе:

– Әсәйең бөтә эшемде ҡулымдан тартып алып тик тора. Нимәгә тотонһам да, "үҙем" тип, килә лә йәбешә. Нисек итергә икән?

Айҙар әсәһенә өндәште, мәлен тура килтереп:

– Әсәй, ниңә улай итәһең? Киленеңә лә ышаныс белдер, – тине.

– Беҙҙең өйҙә өсөнсө кеше – артыҡ.

Шулай тип әйтте лә, тора-бара шул әйткәнен иҫбатланы ла. Артыҡ кеше сығып китте.

Икенсе ҡатыны, Рауза, Айҙарға шундай шарт менән килде: әсәйеңдән айырым сығабыҙ. Сыҡтылар. Тик туйҙан һуң ялға киткәндә әбейгә аҫҡыс ҡалдырғайнылар, шунан һуң кире ала алманылар ҙа. Ә аҫҡысы булған ҡәйнә көн дә килде лә инде, килде лә үҙенсә ҡыландырҙы, килде лә үҙ ҡанундарын булдырҙы. Түҙеме бөткән килен иренә ябырылды:

– Әсәйеңде туктат! Ниңә беҙҙең өйҙә беҙгә йәшәргә бирмәй ул?

Айҙар ауыҙын аскайны ғына, әсәһе уны кире яптырҙы:

– Беҙҙең арала өсөнсө – артыҡ!

Өсөнсө ҡатынын ир инде парлашыуға өмөт өҙгәс кенә осратты. Беренсе класҡа уҡырға барған улы ла бар ине Ләйсәндең. Айҙар ҡатындың үҙен дә, балаһын да яратты ла ҡуйҙы. Бергә йәшәргә саҡырҙы. Күҙ теймәһен, матур ғына итеп ғаилә ҡороп ебәрҙеләр. Хәҙер ял һайын улдарын әсәһендә ҡалдыралар. Әбей бер нәмә лә өндәшмәй, сөнки Ләйсән уға баштан уҡ аңлатты:

– Беҙ ирем менән икәү, һеҙ ейәнегеҙ менән икәү, беребеҙҙә лә артыҡ өсөнсө кеше юҡ, әйе бит? Әйҙәгеҙ, шулай ғына гөрләшеп йәшәйек.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

podpiska.pochta.ru